*Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА*

# Халыҡ хәтеренә тоғролоҡ



*Фәнүзә Айытбай ҡыҙы Нәҙершина*

Тыныс һәм тыйнаҡ матурлыҡ менән арбай был яҡтар. Һулыштарҙы иркенәйтеп ебәрер иркенлек, офоҡтарҙың әллә ҡайҙарға әйҙәй торған көсө бар бында. Ошо хозурлыҡта тирәйүнде ярҙарында үҫкән әрәмәләре менән биҙәп, бормаланып-бормаланып һылыу Өршәк аға.

Танылған ғалимә, филология фәндәре докторы, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Фәнүзә Айытбай ҡыҙы Нәҙершинаның булмышында ни яғы менәндер тыуған яғының тәбиғәтенә оҡшашлыҡ күрәм. Тыйнаҡ матурлыҡ, күңел киңлеге, ҡараштарҙың иркенлеге, мөләйем яғымлылыҡ... һәм сикһеҙ ихласлыҡ. Йәнә тәрәнлек һәм юғарылыҡ — үҙе мөкиббән китеп яратҡан башҡорт йырҙарындағы кеүек.

Фәнүзә Айытбай ҡыҙы — ысын мәғәнәһендә халыҡ йырҙарының һәм ҡурай моңоноң тылсымында тәрбиәләнгән бәхетле зат. Йырлау һәләте атаһының нәҫеленән килә. Айытбай ағай ҡурай уйнамай сәй ҙә эсмәй торған күтәренке күңелле, ихлас кеше була. Миңнесара апайҙы ла йыр-моңдоң, фәһемле фекерҙең баһаһын тәрәнтен аңлаған бай күңелле, йор һүҙле, кешелекле булғаны өсөн ихтирам итә ауылдаштары. Зиһен ҡеүәтенең көсөн аңлап, күңел юғарылығының тәмен татып үҫә ғаиләлә Фәнүзә. Шуға күрә ғүмере буйы кешеләр менән мөғәмәләһендә ошо аҡыллы, тыйнаҡ сабырлыҡ тантана иткән мөхиттең йоғонтоһон тойоп, шунда һалынған күркәм сифаттарға таянып йәшәй. «Әсәйем бер һөйләм менән генә һеңдерерлек итеп әйтә белә торғайны. Ҡыҙлыҡһыҙ бәндә хаҡында күп һөйләп тормай: «Кеше үҙен-үҙе белһә, йөрәге ярылып үлер ине», — тип кенә ҡуйыр ине», — тип хәтерләй Фәнүзә апай. Үҙҙәре шаҡтай өлкәнәйгәс донъяға килгән кинйә ҡыҙҙарын һөйөү нурында ҡойондороп, хәҙер ғалимдар халыҡ педагогикаһы тип нарыҡлаған һәм ентекләп өйрәнгән рухта тәрбиәләй Айытбай ағай менән Миңнесара апай. Наҙға туйып, теләктәрен ғәмәл итеп үҫкәнгә, унда донъяға ла, кешеләргә лә мөхәббәтле ҡараш, бер кемдән дә көнләшә белмәү, һис кем менән ярышмау, үҙаллылыҡ, эске азатлыҡ кеүек күркәм сифаттар формалаша. Рухи азатлыҡ тойғоһон ғүмер буйы һаҡлап ҡала алған бәхетле кеше ул Фәнүзә Айытбай ҡыҙы Нәҙершина.

Әсәһе аш-һыуға оҫта, өйҙәре йыйнаҡ һәм хужалар ҡунаҡсыл булғанға, уларға һәр саҡ артистар, районда килгән яуаплы кешеләр фатирға төшә торған булған. Һуғыш йылдарында эвакуацияланып килгән немец ҡатыны уларҙа байтаҡ ҡына йәшәп киткән. Кескәй Фәнүзә унан матур итеп русса һөйләшергә өйрәнеп ҡала. Ошондай белемде һәм һәләтте баһалаған мөхит ҡыҙыҡайҙағы тәбиғәт тарафынан мул һалынған һәләттәрҙең асылыуына ыңғай йоғонто яһағандыр, күрәһең. Биш йәшенән үҙ алдына уҡырға өйрәнгән Фәнүзәгә, мәктәпкә төшкәс, Әмирхан Килдин, Бикә Мырҙабаева, Аҡбикә Ильясова кеүек, уҡытҡан фәндәренә генә түгел, уҡытыусы һөнәренең үҙенә һөйөү уятырлыҡ ысын мәғәнәһендәге оҫта педагогтарҙа белем алыу бәхете тейә, уларға оҡшарға тырыша. «Атайым менән әсәйем берәй ергә китеп, өйҙә бер үҙем ҡалған саҡтарымда тиҙ генә ишекте бикләп алам да, сәсемде өлкәндәрсә тарап, яурыныма шарф һалып, уҡытыусыларымдың ҡылыҡ-ишараһын ҡабатлап, шиғыр һөйләргә ярата торғайным», — тип хәтерләй ғалимә. Һәйбәт уҡыу менән бергә, ул мәктәп тормошонда ла актив ҡатнаша. Пионер, комсомол эштәрендә йөҙөп, мауығып эшләй, концерттарҙа Рәшит Ниғмәтиҙең, Ғәлимов Сәләмдең поэмаларын оҫта итеп һөйләй. Ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, ул Стәрлетамаҡ педагогия училищеһына уҡырға инә. Бында ла гел бишле билдәләренә генә өлгәшә, йәмәғәт эштәренә лә өлгөрә. Ҡыҙҙың һәләтен юғары баһалаған уҡытыусылары уға артабан уҡырға кәңәш итә. Тик ул инде өлкәнәйгән ата-әсәһенең елкәһендә йәшәргә теләмәй, тәүҙә Мораҙым мәктәбендә, унан комсомолдың район комитетында мәктәптәр бүлеге мөдире булып эшләй. Шул уҡ ваҡытта Стәрлетамаҡ педагогия институтына ситтән тороп уҡырға инә. Әммә һәр нәмәне мауығып, төпсөрләп башҡарырға ятҡанлыҡтан, ситтән тороп уҡыу ҡәнәғәтләндермәгәс, икенсе йыл көндөҙгө бүлеккә күсә. Дүртенсе менән бишенсе курстарҙы экстерн юлы менән бер йылда теүәлләй һәм институттың филология һәм тарих бүлеген ҡыҙыл дипломға тамамлай. Уҡыу алдынғыларын институттың ул осорҙағы ректоры, һәләтле кадрҙарҙы үҫтереү мәсьәләһенә дәүләт күҙлегенән ҡарай белгән Солтанғужин ағай үҙенә йыйып ала. Шунда ул Фәнүзәгә артабан аспирантураға барырға кәңәш итә һәм күренекле ғалим Жәлил Кейекбаевҡа хат яҙып бирә. Ә Ауырғазы районының мәғариф бүлеге юғары белемле егерме өс йәшлек уҡытыусыны түҙемһеҙлек менән көтөп тора. Уны шунда уҡ тыуған ауылына мәктәп директоры итеп тәғәйенләйҙәр.

Үҙенә йөкмәтелгән һәр бурысты еренә еткереп башҡарған һәм үҙ тирәһенә башҡаларҙы ла йәлеп итә, рухландыра белгән йәш белгес ең һыҙғанып эшкә тотона.

«Ул ваҡытта мәктәп эргәһендә ниндәй ҙә булһа тереклек тоторға йөкләмә бирелгәйне. Беҙ йорт ҡуяндары үрсетергә булдыҡ. Колхоз рәйесен өгөтләп, техника һорап алдым. Һарай төҙөр өсөн тауҙан таш сығарабыҙ, нигеҙ һалабыҙ. Эш ҡайнап тора, — тип йылмайып хәтерләй ул саҡтарҙы Фәнүзә Айытбай ҡыҙы. — Шул уҡ ваҡытта артабан уҡыу теләге лә тынғылыҡ бирмәй».

Шуға ла үҙен һынап ҡарамаҡсы булып, тәүәккәлләй, өс кенә көн һорап, Өфөгә юллана. Башҡорт дәүләт университетында Жәлил Кейекбаевты эҙләп таба. Мәшһүр ғалим бер аҙ әңгәмәләшеп, ҡыҙҙың белем кимәлен, фекер йөрөтөү ҡеүәһен самалай һәм фән менән шөғөлләнергә

теләүен хуплай. Тик ғилми хеҙмәтте Лев Толстойҙың йәки Дж. Голсуорсиҙың әҫәрҙәренә бағышларға йыйыныуын хушһынмай. «Толстой менән Голсуорсиҙы өйрәнергә урыҫтар менән инглиздәр бөткән тиһеңме әллә?! Үҙебеҙҙең башҡорт фәнендә өйрәнә торған өлкәләр етерлек, — ти ул. — Унан, һин саҡ ҡына һуңланың. Быйылға Марат Зәйнуллин тигән егетте алдым. Икенсе йылға мотлаҡ кил. Немец теленән имтиханды ла үҙем алырмын», — тип ҡул биреп хушлаша. Алдына ҡуйған маҡсаттарын бойомға ашырыуҙы кисектерергә яратмаған ҡыҙ шул килеүендә үк имтихандарын уңышлы тапшырып, СССР фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы аспирантураһына уҡырға инә. Шулай итеп яҙмыш уны фольклорсы Әхнәф Нурый улы Кирәев менән осраштыра.

Әгәр фән юлын һайламаһа, моғайын, Фәнүзә Нәҙершина бик һәйбәт етәксе булыр ине. Сөнки йәш кенә сағынан уҡ унда ойоштороу һәләте асыла, ул дөйөм мәнфәғәттәр өсөн янып, тормоштоң уртаһында ҡайнап йәшәүҙән тәм таба. Пионер, артабан комсомол эштәрендә башлап йөрөгәне өсөн студенттар һәм йәштәрҙең Мәскәүҙә үткәрелгән VI Бөтә донъя фестивалендә ҡатнашыу бәхетенә ирешә. Хәйер, ул йәмәғәт эштәренән бер ваҡытта ла ситтә ҡалмай, артабан Өфө ҡала советына депутат итеп һайланғас та үҙен принципиаль фекерле шәхес булараҡ раҫлай.

Шулай ҙа фәндә уңышҡа ирешер өсөн башҡараҡ сифаттар кәрәк. Бында Нәҙершинаның үҙаллы һәм объектив фекер йөрөтөү ҡеүәһе, төпсөрлөгө, белемгә ынтылышы, ҡыҙыҡһыныусанлығы өҫтөнлөк ала. Материалды сағыштырма өйрәнергә һәм ҡыҙыҡһыныу даирәһен киңәйтергә кәрәклеген йәштән үк аңлай. Китапханаларҙа баш күтәрмәй шөғөлләнеү, архивтарҙа эҙләнеү һөҙөмтәһендә ул тиҙ арала халыҡ ижадында үҙе өсөн мөһим булған жанрҙарҙы билдәләй, һәм, бәлки, башта бәләкәй генә, әммә ғалим булып формалашыр өсөн мөһим булған асыштарын яһай. Фән менән шөғөлләнә башлағас та, зирәк зиһенле, эҙләнеүсән характерлы ҡыҙ үҙенең тормошта юлды дөрөҫ һайлауына инана. Тик тәүҙә атаһының, унан әсәһенең бер-бер артлы ҡаты ауырып китеүе, уның хәстәренә мохтаж булған иң ғәзиз кешеләренең эргәһендә йыш була алмауы ғына күңелен болоҡһота. Бер мәл хатта уҡыуҙан баш тартырға ла уйлап ҡуя. Тик Айытбай ағай ҡыҙын хупламай, алдына ҡуйған маҡсатына ирешеүен теләй. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, сикһеҙ яратыуҙары менән тотош бер донъяны, бәхетле һәм ҡотло мөхитте тәшкил иткән ата менән әсәгә ҡыҙҙарының улар хыялланырға ла ҡыймаған үрҙәргә артылыуын күрергә насип булмай. Улар бер-бер артлы донъя ҡуя.

«Атайымдың вафатынан һуң һигеҙ ай ғына йәшәгән әсәйемде ерләгәндең иртәгеһенә Өфөгә алып китергә машина килеп туҡтаны. Үҙ ғүмеремдә беренсе тапҡыр тыуған йортомдан атай-инәй фатихаһын алмай сығып киттем. Тәүлектең ниндәй ваҡытында ҡайтып инһәм дә, самауырын ҡайнатып, аштарын бешереп, һағынып көтөп торған кешеләремдән мәхрүм ҡалған тыуған йортом бойоҡ тәҙрәләре менән етемһерәп оҙатып ҡалды. Күңел йәрәхәттәрем шул тиклем тәрән һәм әрнеткес ине. Ауылыма байтаҡ ваҡыт ҡайтырға һәм атайым менән әсәйемһеҙ ҡалған нигеҙемә баҫырға үҙемдә көс таба алманым», — тип хәтерләй Фәнүзә апай.

Иң ауыр мәлдәрҙә кешене күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүҙән бары тик эш кенә ҡотҡара алғанын аңлап, ул тағы ла бирелеберәк уҡырға тотона. Мәскәүҙәге В.И.Ленин исемендәге китапхана уның иң яратҡан урынына әүерелә. Шул уҡ ваҡытта баш ҡалала картина галереяларына, театрҙарға йөрөп, донъя мәҙәниәте хазиналары менән танышыу форсатынан да файҙалана. Ошо йылдарҙа тарихсы Әбүбәкер Усманов уны күренекле фольклорсы Эрна Померанцева менән таныштыра. Йәш ғалимәне, һәләтен юғары баһалап, Мәскәүгә саҡыралар. Мәркәздә мөмкинлектәрҙең һәм аралашыу мөхитенең киңлеген, донъя кимәлендә танылған ғалимдар менән йәнәш эшләүҙе күҙ алдына килтереп елкенә биреп ҡуйһа ла, Өфөнө ташламай Фәнүзә Айытбай ҡыҙы. Бер яҡтан, етәксеһе Әхнәф Кирәевҡа ихлас ихтирам һәм хөрмәт тойғоһо тотҡарлай, икенсенән әсәһенең: «Алтындың сыҡкан ерендә ҡәҙере юҡ», тигәнгә ышанма, ҡыҙым. Йығылып барғанда ла үҙ ереӊ терәк булыр», — тигән һүҙҙәре иҫенән сыҡмай.

Ғүмер юлында фәнгә мөкиббән киткән, юғары мәҙәниәтле һәм киң күңелле кешеләрҙе күп осрата, улар менән бергә эшләй Фәнүзә Нәҙершина. Күңелендә фән юлына баҫҡан тәүге йылдары һәм остаздары хаҡында матур хәтирәләр һаҡлай.

Әле беҙ «Башҡорт халыҡ ижады» серияһында донъя күргән ҡалын томдар менән файҙаланғанда, уларҙа тупланған хазиналарҙы ил ҡыҙырып эҙләп табыу, яҙып алыу, өйрәнеү һәм халыҡҡа кире ҡайтарыу өсөн күпме көс түгелгәнен күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ. Әйтерһең дә, был рух гәүһәрҙәре һәр ваҡыт ошолай әҙер генә кәштәлә теҙелеп торған! Ә бит фольклор ҡомартҡыларын йыйыу, барлау һәм ентекле өйрәнеү үҙенә күрә бер фиҙакәрлек талап итә. «Ҡыпсаҡ тархан» тигән бер йыр артынан өс йыл йөрөргә тура килде», — тип хәтерләй Фәнүзә апай һәм Әлшәй районы Ҡыпсаҡ-Аҫҡар ауылындағы йыр яратҡан Миңйыһан Ғайсинанан яҙып алған моңло көйҙө йырлап күрһәтә.

Халҡыбыҙҙың ҡомартҡыларын хәтерҙәрендә һаҡлаған һәм уның баһаһын аңлаған зирәк кешеләрҙе хөрмәтләргә һәм ҡәҙерләргә, уларҙың күңелдәренә юл табырға Әхнәф Нурый улы Кирәевтан өйрәнә ул. «Әхнәф Нурый улы мәҙәниәтле, зыялы, ғәйәт итәғәтле кеше ине, — тип һоҡланып иҫкә ала Фәнүзә апай. — Оҙон штормовкаһын кейеп, яурынына ҡыр сумкаһы аҫып ала ла ауылдан-ауылға, өйҙән-өйгә йөрөй. Салауат Галин, Ниғмәт Шоңҡаров һәм мин — буласаҡ ғалимдар — уға эйәргәнбеҙ. Таныш булмаған әллә кемдәргә халыҡ асылып бармай. Уттай эш ваҡытында, ҡырылмаһа ҡырҡ мәшәҡәтле кеше тота килеп йырлап, әкиәт һөйләп, йомаҡ ҡойоп ултырһын, имеш. Килешмәгәнде, тип уңайһыҙлана әле ул башта. Һине һынап ҡарай, һөйләшергә теләмәгәнен белдерә. Әммә Әхнәф Нурый улы тел асҡысын таба белә. Кәйеф күтәрерлек матур ғына комплимент әйтә, маҡтап ебәрә йәки шаярта. Тик бында ла сама тойғоһо кәрәк. Артыҡ шаштырып ебәрһәң, яһалма ҡыланһаң, эште боҙоп ҡуйыуың ихтимал. Кеше бит ялғанды тиҙ тоя. Ихласлыҡты иһә юғары баһалай. Шуға күрә информаторҙар менән дуҫлашып, яҡынайып китәһең. Ул һинең менән бер кемгә лә һөйләмәгән зарҙарын уртаҡлаша. Ә халыҡта, айырыуса ҡатын-ҡыҙҙа зар аҙмы ни?»

Экспедицияла йыйып алынған байлыҡ артабан ентекләп өйрәнелә. Кәбәк араһынан тос бөртөктәрҙе айырып алып, уға ғилми яҡтан баһа

биреүҙә тикшереүсенең шәхсән сифаттары ҙур әһәмиәткә эйә. Был йәһәттән коллегалары Нәҙершинаны юғары баһалай.

«Фольклорсы-тикшеренеүсе булараҡ, Ф.А. Нәҙершина ижадының иң мөһим һыҙаттарын былай билдәләп булыр ине, — тип яҙҙы ғалим Рәшит Шәкүр үткән быуаттың һикһәненсе йылдарында уҡ. — Иң беренсе, халыҡтың рухына һәм мәҙәниәтенә яҡты һәм тынғыһыҙ мөхәббәт. Икенсенән, фекерлелек, төплө, нигеҙле, системалы ҡараштарҙан сығып эш итә белеү».

1962 йылда аспирантура тамамлап, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләй башлағандан уҡ, ул үҙенең фәнгә ихтирамлы һәм фиҙакәр мөнәсәбәте менән өлкән коллегаларының иғтибарын йәлеп итә. Уның фекеренә ҡолаҡ һалалар, етди эштәрҙе ышанып тапшыралар. Ул бер ваҡытта ла һынатмай. Башҡорт фольклорының көнүҙәк мәсьәләләрен өйрәнеүгә ҙур өлөш индерә.

Ошо йылдар эсендә Фәнүзә Нәҙершина 200-ҙән ашыу ғилми хеҙмәт яҙған, 20 китабы донъя күргән. 1983 йылда нәшер ителгән «Халыҡ һүҙе», 1986 йылда сыҡҡан «Халыҡ хәтере» монографиялары ғилми даирәләрҙә башҡорт халыҡ ижадының афористик жанрҙарын, тарихи прозаһын — риүәйәт, легендаларын, хөрәфәти хикәйәләрен өйрәнеүҙә яһалған етди аҙым булараҡ юғары баһа ала. Күп томлы «Башҡорт халыҡ ижады» серияһында башҡорт һәм урыҫ телдәрендә донъя күргән «Йомаҡтар» (1979, 1993), «Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр» (1980, 1993), «Риүәйәттәр һәм легендалар» (1980, 1987, 1997) томдары — юғары фәнни кимәлдә әҙерләнгән хеҙмәттәр. Уларҙың барыһына ла баш һүҙ, аңлатмалар Ф.Нәҙершина тарафынан яҙылған. Урыҫ теленә күренекле әҙип Ғәзим Шафиҡов менән бергә тәржемә иткән. «Башҡорт халыҡ ижады» томдары өсөн бер төркөм хеҙмәттәштәре менән бергә 1987 йылда Фәнүзә Нәҙершина Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды. Был томдар элекке Советтар Союзы күләмендә үткәрелгән конференцияларҙа илдең абруйлы, ҙур ғалимдары тарафынан да юғары баһалана, уларҙа тупланған материалдың кимәле, фәнни аппараттың тулы һәм төплө яҙылғанлығы һыҙыҡ өҫтөнә алына.

«Фольклор нигеҙендә фәндең төрлө йүнәлешендә эшләүселәр күбәйҙе. Философия, социология, тел белемендә фольклор материалдарына таянып кандидатлыҡ, докторлыҡ диссертациялары яҙылды. Был бик ыңғай күренеш. Тимәк, беҙ башҡа фәндәргә яңы йүнәлеш бирҙек, — ти Фәнүзә Айытбай ҡыҙы. — Сөнки фольклор философия, тел байлығы, юриспруденция буйынса ла информация бирә. Йәш ғалимдар алдында әле бихисап теоретик проблемалар тора: лингво-фольклористика, этно-лингвистика йүнәлештәрен үҫтерергә кәрәк. Үҙебеҙҙең хазиналарҙы башҡа халыҡтар ижады менән сағыштырма өйрәнеү ҙә бик күп мөмкинлектәр асасаҡ. Быға тиклем күберәк төрки халыҡтар, фарсы, монголдарҙың ижады менән сағыштырһаҡ, хәҙер Көнбайыш Европа, Америка халыҡтары фольклоры менән дә йәнәш ҡуйып өйрәнеү мөһим».

Фәнүзә Нәҙершина донъя, Рәсәй һәм республика күләмендә уҙғарылған ғилми конференцияларҙа, конгрестарҙа, симпозиумдарҙа ихлас ҡатнаша. Был йыйындарға әҙерлек процесы, донъя күреү, үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнамай, табыштарың менән уртаҡлаша алыу мөмкинлеге уның өсөн оло шатлыҡ. «Ундай осрашыуҙарҙан һуң ҡараштар иркенәйеп ҡала»,

— ти ул. — Сит илдәрҙә сығыш яһағанда донъя кимәленә алып сығырлыҡ тарихыбыҙ, халыҡ ижадыбыҙ хазиналары барлығын, сит ил ғалимдарының уға ҡарата иғтибар һәм ихтирам күрһәтеүенә ғорурланам. Фән менән йәшәгән, ғилемгә мөкиббән киткән коллегаларымдың бөйөк ябайлығына һоҡланам. Бындай йыйындарҙа башҡорт фәненең ҡаҙаныштары, башҡорт халыҡ ижадының бөйөк үрнәктәре менән башҡа халыҡтарҙы ла таныштырырға форсат тыуа, ә бит ғилем уртаҡлашҡан һайын арта барыу сифатына эйә».

1993 йылда Ф.А.Нәҙершина Төркиәгә симпозиумға саҡырыла, тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бара алмай. Шулай ҙа һөйләргә тейеш булған докладын ебәрә. Доклад башҡа ғалимдарҙың сығыштары менән бергә йыйынтыҡта инглиз телендә нәшер ителә. Шотландияның Эдинбург университетында Исламды һәм Урта Азия илдәрен өйрәнеү факультеты докторы Г.Р.Сабри-Табризи башҡорт ғалимәһенең хеҙмәтен ҡыҙыҡһынып уҡып сыға һәм уны үҙҙәрендә үткәреләсәк йыйынға саҡыра. «Каспий һәм Урта Азия — 1994» Халыҡ-ара симпозиумында Фәнүзә Нәҙершина «Башҡорт легендаларында боронғо ҡараштарҙың сағылышы: Изгеләштерелгән ҡоштар» тигән доклад менән сығыш яһай.

— Халҡыбыҙҙың мираҫын ентекләп аңлатып биреү ниәтендә теманы үтә киң итеп алманым. Әммә, тыңлаясаҡ аудиторияны иҫтә тотоп, легендаларыбыҙҙы, йолаларыбыҙҙы башҡа халыҡтарҙың йолалары менән сағыштыра барҙым. Ҡыҫҡа ғына инеш һүҙ әйттем. Уны «Урал»дан башланым. Башҡорт өсөн был төшөнсәнең ниндәй мәғәнәләр йөрөтөүен аңлатҡандан һуң, ҡурайҙа Ишмулла Дилмөхәмәтов башҡарыуында магнит таҫмаһына яҙылған «Урал» көйөн тыңлаттым. «Был көйҙө башҡорт халҡының рухи тамғаһы итеп ҡабул итегеҙ», — тинем. Ҡурайҙы күрһәттем. Башҡорт халыҡ ижадындағы иң изге образдар, иң гүзәл легендалар Урал ерлегенә бәйләнгәнен әйтеп, «Сыңрау торна»ны тыңлаттым.

Симпозиумдың рәсми өлөшө тамамланғас, Сабри-Табризи әфәнде ҡунаҡтарҙы өйөнә киске ашҡа саҡыра. Ошо осрашыуҙа Фәнүзә апай үзбәк шағиры Хәмидкә «Рухи хазиналар» китабынан бер көйҙө әкрен генә көйләп күрһәткәнен ишетеп ҡалып, эргәләренә йыйылып китәләр. Йырлауын һорағас, хужаларға төбәп «Йәйләү»ҙе («Ҡымыҙ йыры»н) башҡара. Тағы ла йырлауын үтенгәс, «Каруанһарай», «Сәлимәкәй», «Уйыл» йырҙарын, «Ҡыпсаҡ атлы» назымын ишеттерә, жанрҙарына ҡыҫҡаса характеристика бирә. Уның һөйләгәнен шунда уҡ инглиз теленә тәржемә итеп баралар. Барыһы ла башҡорт йырын ифрат яратып ҡабул итә. Германияның Олденбург университеты профессоры Шапур Равасани: «Ханым, йылға ағышын хәтерләткән йырығыҙҙы тағы бер ҡат йырлап күрһәтегеҙ әле», — тип өндәшә. Ул «Уйыл»ды һорай икән. «Ошо көйҙө ишетә алыуым менән бәхетлемен», — ти ул.

Йыр-моң өсөн сиктәр юҡ. Бындай осрашыуҙар Фәнүзә Нәҙершинаны алдына маҡсат итеп ҡуйған ниәте — башҡорт халыҡ ижады өлгөләрен донъяға танытыуҙың ни тиклем әһәмиәтле һәм кәрәкле эш икәнлегенә тағы ла нығыраҡ инандыра. Ә был теләк уға байтаҡ йылдар тынғы бирмәй.

Бер ваҡыт ул Англияла сыҡҡан белешмә китап менән таныша. Унда эпос терминына аңлатма биргәндә миҫал итеп телгә алынған «Идегә» эпосы — төрки халыҡтарының уртаҡ мираҫы — бары тик бер халыҡҡа ғына ҡайтарып ҡалдырыла. Быға тиклем «Донъя халыҡтары

мифтары» энциклопедияһында ла башҡорт мифологияһы хаҡында мәғлүмәттәр үтә аҙ бирелгәненә кәйефе ҡырылып йөрөгән ғалимә, был яңылыш фекерҙе ауыр ҡабул итә. Әгәр ҙә башҡорт мифологияһы донъя фәнендә ошо көнгә тиклем тейешенсә баһаланмаған икән, тимәк, уны фәнни даирәләрҙә танытыу мохтажлығы бар. Тимәк, был мөһим йүнәлеш тә эшләп еткерелмәгән. Ул, был юлы ла булмышына хыянат итмәй, үҙ алдына ең һыҙғанып эшкә тотона. Халыҡ ижадындағы иң әһәмиәтле жанрҙарҙы билдәләй һәм уларҙы инглиз теленә тәржемә итеү хәстәрлеге менән яна башлай. Эргәһенә үҙе кеүек үк энтузиастарҙы туплай. Сәғит Шафиҡов, Булат Ғәниев, Лилиә Тоҡомбәтова, Наилә Әхтәмова, Зөһрә Рәхимова, Айгөл Мөхтәруллина, Римма Шәйбәкова кеүек профессионалдар менән күп йылдарға һуҙылған мауыҡтырғыс та, ҡатмарлы ла ижад йылдары башлана. «Үҙҙәренең эшенә мөкиббән бирелгән, тәрән белемле һәм юғары рухлы, ысын мәғәнәһендә зыялы инсандарға әйтеп бөтөргөһөҙ рәхмәтлемен, — ти Фәнүзә Айытбай ҡыҙы. — Улар менән эшләү миңә бик күп ҡыуанысл мәлдәр бүләк итте, күңелемде байытты, фекер офоҡтарын киңәйтте».

Ошо тынғыһыҙ эштең тәүге емеше — йырсы Флүрә Килдейәрова менән бергә әҙерләгән «Халҡым йыры» тигән үҙәнселекле баҫма — 1995 йылда I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы алдынан донъя күрә. Уның баш һүҙе, текстары, аңлатмалары өс телдә була. Ҡалын папка эсенә компакт-диск, ике кассета һалынған бүләк китапты шағирҙар Ғәзим Шафиҡов менән Юрий Андрианов руссаға, Зөһрә Рәхимова менән Римма Шәйбәкова инглиз теленә тәржемә итә. Баҫма тиҙ арала таралып та бөтә.

1997 йылда шулай уҡ өс телдә «Башҡорт халыҡ йырҙары, йыр-риүәйәттәре» тигән йыйынтыҡ донъя күрә. Уны ла халыҡ яратып ҡабул итә. II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына шулай уҡ өс телдә «Башҡорт халыҡ риүәйәттәре һәм легендалары» тигән ҙур күләмле йыйынтыҡ нәшер ителә. Артабан өс телдә «Урал батыр» эпосы баҫылып сыға. Фәнүзә Нәҙершина «Салауат Юлаев» энциклопедияһы авторҙарының береһе, унда 100-ҙән ашыу мәҡәләһе баҫылған.

Ошо көндәрҙә был йүнәлештә бергәләшеп эшләнгән алтынсы китап донъя күрергә тейеш. Унда Салауат Юлаев тураһында башҡорт халыҡ ижады өлгөләре тупланған. Йыйынтыҡҡа 260 риүәйәт, эпос һәм йырҙар индерелгән. Ҡайһы берҙәре күләм яғынан бик бәләкәй булыуына ҡарамаҫтан, ғалимәнең иғтибарынан ситтә ҡалмаған, сөнки ул халыҡ хәтерендә милли батырыбыҙға ҡарата һаҡланған мөнәсәбәттең һәр төҫмөрө мөһим һәм әһәмиәтле тип иҫәпләй.

Фәнүзә Айытбай ҡыҙын белгәндәр барыһы ла уның ғәҙәттән тыш тыйнаҡлығын, үҙен-үҙе күрһәтеп барырға яратмауын, баҫалҡылығын билдәләй. Бала саҡтан иғтибар һәм һөйөү өсөн көрәшергә тура килмәгәнлектән, унда яраҡлашыу, яһалмалыҡ кеүек тормошта уңайлы итеп урынлашыу өсөн кәрәк булған сифаттар һалынмаған. Ә шәхестең тәрәнлеген тойомлар өсөн уның эргә-тирәһендәге кешеләр һис юғында һай булмаҫҡа тейеш. Был йәһәттән ул үҙен бик даланлы, тип иҫәпләй. Академия уның өсөн изге урын. «Ҙур фән — академияла. Аралашыу ҙа бында кешенең тотҡан дәрәжәһенә түгел, эшенә ҡарап», — ти һәр ваҡыт иң тәүҙә үҙенең намыҫы һәм эше алдында яуаплылыҡ тойоп эшләгән Фәнүзә Айытбай ҡыҙы.

Фәндә кадрҙар мәсьәләһе һәр саҡ мөһим. Тәбиғәте менән ярҙамсыл булғанлыҡтан, Фәнүзә Нәҙершина аспиранттары менән эшләүгә ҙур әһәмиәт бирә, кәңәштәрен йәлләмәй, белеме менән йомарт уртаҡлаша, хатта тормоштарында ла хәлдәренә инеп, ярҙам итеп торорға тырыша. Шул уҡ ваҡытта ифрат талапсан. Сөнки ғилем юлын һайлағанда үҙеңдән бигерәк фәнде яратыу, яуаплылыҡ тойоп, «мин эшләмәһәм, кем эшләр» тигән ныҡышмал теләк менән мауығып йәшәү мөһим.

Кеше ни тиклем һәләтле булһа, уның мауығыу даирәһе лә шул тиклем киңерәк. Йылдар үткән һайын ғалимәнең потенциалы бары тик алдына институттағы эше һәм вазифаһы ҡуйған бурыстарға ғына һыймай, төрлө яҡтарҙан бөҫеп сыға башлай. 1984 йылдан 1990 йылға тиклем Фәнүзә Нәҙершина Башҡортостан телевидениеһында «Йыр тарихы — халыҡ тарихы» тигән автор программаһы алып бара. Уның тәүге тапшырыуҙарында мәшһүр композитор Хөсәйен Әхмәтов та ҡатнаша. Алты йыл буйы бик күп йырҙар тарихы бәйән ителә, тапшырыуҙарҙа талантлы йырсылар, ҡурайсылар, ҡумыҙсылар, думбырасылар, башҡорт йырҙарын башҡарыусы өлкән һәм йәш быуын вәкилдәре сығыш яһай. Был тапшырыуҙарҙың үҙенсәлеге башҡорт халыҡ йырҙарын фәнни нигеҙгә ҡуйып, халыҡтың тарихына, этнографияһына бәйләп, төрлө варианттарын сағыштырып өйрәнеүҙә ине. Башҡортостан телевидениеһы төшөргән Асылыкүл һәм Дим буйы башҡорттарының фольклорына, көнкүреш йолаларына арналған «Рухи хазиналар эҙенән», мәшһүр ҡурайсы Кәрим Дияров хаҡындағы «Күңелдәре тулы моң уның» тигән фильмдарҙың авторы ла ул. Танылған йырсы Флүрә Килдейәрованың ижадына арналған «Һәр көнөм йыр менән», Ейәнсура районында төшөрөлгән «Һабантуй» фильмдарының ғилми консультанты ла булды.

Уйламай һөйләү түгел, булған фекерен дә ҡат-ҡат үлсәп кенә белдергән Фәнүзә Айытбай ҡыҙы теләһә ниндәй заманда ла халыҡҡа мөһим булған дөрөҫлөктө еткереү юлын таба ине. Шул уҡ ваҡытта ул һәр саҡ «зыян килтермә» тигән ҡараштан сығып эш итеүҙе хуплай. Сөнки һәр кемдең, бигерәк тә ғалимдың эске цензоры булырға тейеш тип иҫәпләй. Кешелек тарихы ифрат ҡатлаулы, тормош ҡатмарлы, милләттәр һәм кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр ғәйәт нескә. Шуға күрә ҡайҙа, кем алдында, ниндәй кимәлдә асылырға мөмкин булғандың нисбәтен ғалим кеше яҡшы белергә тейеш. Бының өсөн, әлбиттә, белем һәм фәндәге ҡаҙаныштар ғына ла етмәй, тәбиғи итәғәтлелек кәрәк. Коллегалары ғәҙеллеге, сама белеүе, әйткән һәр һүҙе өсөн яуаплылыҡ тойғаны өсөн Фәнүзә Нәҙершинаны айырыуса ныҡ ихтирам итә, ә был уның фекерҙәренең бәҫен тағы ла нығыраҡ күтәрә.

Ғалим кешегә үҙ эҙләнеүҙәренән тыш, башҡаларҙың, ғәйәт абруйлы ғалимдарҙың да, фәндә тәүге аҙымдарын яһаған йәштәрҙең дә хеҙмәттәрен ентекләп уҡырға, фекер тупларға һәм уйлағандарын дәлилле итеп әйтеп бирергә кәрәк. Үҙ-ара фекер алышыу — фәндә шунһыҙ мөмкин түгел. Ә бының өсөн төплөлөк, үҙаллы фекер йөрөтөү көүәһе, мәғлүмәтлелек һәм, һис шикһеҙ, бер ни тиклем ҡаһарманлыҡ кәрәк. Мөнәсәбәт боҙоуҙан ҡурҡыу, башҡаларҙың хеҙмәтенә битарафлыҡ фәндәге үҫешкә аяҡ салған комплиментарлыҡҡа килтерә. Был йәһәттән Фәнүзә Нәҙершина бик талапсан. Күргән етешһеҙлектәрҙе йәшереп ҡалдырмай, иҫкәрмәләрҙе ихлас итеп әйтә. Шулай уҡ үҙе лә, хатта иң йәш,

яңы эшләй башлаған кешенең һорауын да иғтибарһыҙ ҡалдырмай. Насар уй менән әйтмәгәс, үпкәләр, тип ҡарап тормай. Унан, академияның бәҫе, мәртәбәһе бар. Фән ул, ғөмүмән, объективлыҡ булған ерҙә генә үҫешә ала.

Фәнүзә апай көндәлек тормоштоң ығы-зығыларынан өҫтөнөрәк ҡала белеү, кешеләр менән юғары кимәлдә мөғәмәлә итеү кеүек шаҡтай һирәк осрай торған һоҡланғыс һәләткә эйә. Уның емешле эшләүенең бер сере ошондалыр, моғайын. Юғиһә, дан көҫәү, исем-ат артынан йүгереү кеүек һуңғы йылдарҙа айырыуса таралып киткән тышҡы ялтырауыҡтар бит кешенең иғтибарын ситкә йүнәлтә, ваҡытын ала, хатта ҡайһы бер осраҡтарҙа шәхесен емереүе ихтимал. Был йәһәттән ул ғаиләһендә лә һәр саҡ аңлау тапты. Тормош иптәше лә эше һәм ғаиләһе өсөн йәнен бирергә әҙер торған ғәҙел, тоғро кеше була.

«Яҡты шәхес ине ул. Мин дә уның алдында үҙемде ваҡламаҫҡа тырыштым, — тип хәтерләй Фәнүзә апай. — Утыҙ йыл бергә йәшәп, бер тапҡыр ауыр һүҙ әйтешмәнек». Бер-береһенә терәк булып, аңлашып йәшәгәнгә күрә, ғаиләлә һәр саҡ ҡот һәм татыулыҡ була. Ҡыҙҙарын һөйөү-наҙға сорнап, шәхестәрен ихтирам итеп тәрбиәләгәнгә күрә, улар ата-әсәһенә терәк булып үҫеп етә. Икеһе лә фән юлын һайлай. Өлкән ҡыҙҙары Ирина Һиҙиәтова әле Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәгендә генетика буйынса эҙләнеүҙәр алып бара. Элла аспирантура тамамланы. Ул — сит телдәр буйынса белгес, әле әсәһе менән бергә эшләгән «Башҡортса-инглизсә-русса мәғәнәләш мәҡәлдәр һүҙлеге» донъя күрҙе. Әлбиттә, балалар һәм ата-әсә араһында рухи уртаҡлыҡтың булыуы, уртаҡ ҡиммәттәр менән йәшәү бик ҙур бәхет. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, атай кеше генә донъянан иртә китте. Ятаҡан ҡатынына булған ихтирамын, уның туғандарына ғына түгел, тотош халҡына күсерә алған киң күңелле һәм аҡыллы ул затты ғаиләһе һәм дуҫтары һаман һағынып та, юҡһынып та хәтергә ала.

Һүҙҙемдең ахырында Ирек Кинйәбулатовтың «Сыңрау торна һымаҡ» шиғырына мөрәжәғәт иткем килә. «Халыҡ ижадын өйрәнеүсе ҙур ғалимә Фәнүзә Нәҙершинаға» тип бағышлама ҡуйылған эске моң һәм яҡты нур менән һуғарылған әҫәрендә:

Иҫкәртәһең ипләп замананың
Әҙер торған тишек шоманын;
Хәтәрлеген хәтер юғалтыуҙың,
Төшөү томаналыҡ томанын»,

— ти күренекле шағир һәм «ерҙең ҡотон һәм йәмдәрен һаҡлаған» изге ҡош — сыңрау торнаға сағыштыра.

Был яҡты донъяға тыуған һәр кемгә Йәшәйеш үҙенең бойомға ашырырға теләгән хыялдарын һәм ниәттәрен һала булыр. Ошо өмөттәре аҡланырмы Яратыусының, юҡмы? Был һәр кемдең үҙенә бәйләнгән. Шуны тойоп, маҡсатлы йәшәгән шәхестәр тормоштары һәм эштәре менән дөйөм кешелектең хазина келәтенә үҙ өлөшөн өҫтәй, донъяның яңы биҙәктәрен аса. Шундай шәхестәре күберәк булған һайын халыҡтың рухы ныҒыраҡ, күңеле яҡтыраҡ, киләсәге өмөтлөрәк була. Бәрәкәтле, емешле ғүмере менән милләтен ҙурлаған зыялы инсандарыбыҙҙың береһе ул Ауырғазы районы Мораҙым ауылы ҡыҙы Фәнүзә Нәҙершина.